Рөстәм Нурыев

# Йыһанға
# йышыраҡ
# ҡара!

Өфө – 2021 йыл

УБК 821.512.141
ББК 84
Н 90

**Нурыев Рөстәм**

Йыһанға йышырак карa!: Ҡобайырҙар, бәйеттәр, әйтештәр, публицистика.
– Өфө: «Самрау», 2021. – 68 бит.

Авторҙың ижади йыйынтығына төрлө йылдарҙа яҙылған ҡобайырҙары һәм бәйеттәре, сәсәндәр әйтешендәге телмәрҙәре, «Башҡортостан» һәм «Киске Өфө» гәзиттәрендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләләре ингән. Китап 2021 йылда үткәрелгән Ҡошсо ырыуы башҡорттары йыйынына бағышланып нәшер ителгән. Насип Һаҡмар сәсән, Тамара Искәндәриә, Фирүзә Абдуллина шиғырҙарын асыҡ лицензия менән баҫтырыу тураһында авторҙарҙан рөхсәт алынған.

ISBN
(CC-BY 4.0) Рөстәм Нурыев, Насип Һаҡмар, Тамара Искәндәриә, Фирүзә Абуллина

## Инеш һүҙ урынына

**Ғатауллин Рөстәм**
**Шакирйән улы**,
**Рөстәм Нурыев**
(ижади ҡушаматы)




Ҡошсо ырыуы башҡорто. Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ ауылынан. Иҡтисадсы, дәүләт хеҙмәткәре, йәмәғәт эшмәкәре, тыуған яҡты өйрәнеүсе, сәсән.

Башҡортостан статистика хеҙмәтенең етәксе урынбаҫары,
Башҡорт Википедияһы хакимы. Ирекле интернет энциклопедияһы аша башҡорттарҙы халыҡ-ара кимәлдә танытыусы.

- Рәсәй Федерацияһы дәүләт граждандар хеҙмәтенең 1-се класлы кәңәшсеһе;
- Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Журналистар берлеге ағзаһы (2018);
- Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған иҡтисадсыһы (2003);
- Статистика отличнигы (2010);
- Айҙар Байыҡ сәсән исемендәге республика сәсәндәр бәйгеһе лауреаты (2015),
- «Мәсәтле районының 100 данлыҡлы исеме» дипломанты (2019);
- Ирекле энциклопедия мәғлүмәттәрен таратыусы «Викимедиа РУ» Рәсәй йәмғиәт ойошмаһынының «Вики-премия» лауреаты (2014, 2018);
- Рәсәй Федерацияһы Милләттәр буйынса федераль агентлыҡтың күптеллелектте һаҡлау өлкәһендәге йәмғиәт премияһы лауреаты (2020).

**Ҡошсо ырыуы башҡортары**
**йыйынына сәләм һүҙе**

Һаумыһығыҙ, ырыуҙаштар,
Олоһо, йәше, ҡорҙаштар,
Бейҙәр, түрә, хакимдар,
Килгән дуҫтар, ҡунаҡтар!
Ҡорҙа башлап һүҙемде,
Таныштырам үҙемде:
Ҡошсо була ырыуым,
Ләмәҙтамаҡ быуыным.
Үҫеп балиғ булғансы,
Әйҙең һыуын эскәнмен,
Утыҙ биш йылдан уҙҙы,
Илгә хеҙмәт иткәнем.
Күптән инде көткәйнем
Ырыу ҡоро йыйғанын,
Аҡһаҡалдар васыяттарын
Бергә төпләп ҡуйғайным.
Форсатынан файҙаланып,
Ҡағыҙға баҫа һалып,
Еткерәмен уландарға
Изге өмөттә ҡалып.

Тарихты барлап үҙем
Яҡшы киләсәк көтәм,
Йыйынға әйтер һүҙем
Ҡобайыр һөйләп китәм:

Был ҡобайырҙы ижад итеүгә «Киске Өфө» гәзитенең 2015 йылдағы ағинәйҙәр ҡоро тураһында «Донъя дилбегәһен… аҡһаҡалдарға тапшырырға әҙерҙәр» исемле мәҡәләһе этәргес булды. Унда бер оло инәйҙең әсенеп:

– Ағинәйҙәр, һеҙгә әйтәм,
Ил тотҡаһы ирҙәр ҡайҙа?
Донъя ҡалһа ҡатын-ҡыҙға,
Янып әйләнмәçме ҡуҙға?
Дилбегәне тотһа улар,
Кәрәк саҡта ҡаҡһа ҡулдар,
Ил намыçы – ир намыçы,
Ирһеҙ ҡалһаҡ Алла ҡарғар!

тигән һүҙҙәре мине тетрәндерҙе һәм ошо ҡобайыр тыуҙы.

**Егеттәр ҙә булыр Аҡһаҡал…**

Ситкә ҡуйып вики эшемде,
Уҡып сыҡтым «Киске Өфө»нө,
Унда булған барлыҡ мәҡәлә
Елкендерә минең күңелде.
Фәһемле ул һәр бер бүлеге
Кейгәндәргә башҡорт бүреген,
Зыялылар һөйләй фекерен,
Аңлағанға һалып мөкүрен.

Яңы һанда сыҡҡан мәҡәлә,
Уйҙарымды алды көрмәләп:
Ир хәстәрен һалып иңдәренә,
Ағинәйҙәр майҙан тоталар,
Таштимерҙең «Ҡанлы биле»ндә
Ҡор йыйғандар Урал илендә,

«Дилбегәне алһын аҡһаҡалдар!» –
Тигән талап улар телендә...

Инҡар итмәй инәй телмәрен,
Йәшермәйсә ирҙең күҙҙәрен,
Дауам итеп уртаҡ уйҙарҙы,
Әйтәйемсе мин дә һүҙемде:
Ялған оран-ҡотҡо таратып,
«Һин – яугирһең!» – тип, маһайтып,
Нисә быуат инде ҡан менән
Өҙгөләгәс быуын сылбырын,
Ил ҡайғыртҡан ирҙәр үҫтерерҙәй
Аҡһаҡалдар илдә ҡалмаған шул,
Аҡһаҡалдар илдә ҡалмаған...

Аслыҡ, һуғыш, хәмер, бола
Милләткә яйлап ҡәбер ҡаҙа,
Башҡорт ҡаны менән һуғарыла
Низағлашҡас, һәр бер ҡитғала.
Әсәләрҙе һалып ҡайғыларға,
Һурып торған милләт ҡаймағын
Яһил, ана, тағы яуға өндәй,
Ғәҙеллектең һоноп байрағын...

Зарланыуҙың булмаҫ файҙалары,
Яттарҙан да ярҙам көтөүҙән.
Батыр васыятына ант итеп,
Яҡшылыҡты менәр ат итеп,
Ил яҙмышын алып ҡулдарға,
Сығайыҡ беҙ донъя яуларға,
Емерәйек ҡоршау тарлығын,
Танытайыҡ башҡорт барлығын...

Ирҙең бөгөн булһын бурысы:
Сығармаһын ҡындан ҡылысын,
Ғилем менән илен һаҡлаһын,
Яҡшыны тик яҡшы яҡлаһын.
Асайыҡ беҙ милләт асылын
Ыңғай итеп һәр бер ысулын,
Берҙән ишеп ырыу сымдарын,
Ялғайыҡ һуң быуын сылбырын!

Тыңлаһалар йәштәр үҙемде,
Ҡош теленә төргән һүҙемде,
Иҫкә алып Зәки әйткәнде,
Башҡорттарса тотһа теҙгенде,
Егеттәр ҙә булыр аҡһаҡал,
Һаҡлаһалар әгәр улдарын,
Киләсәкте яҡлар өсөн
Яҡлаһалар бөгөн улдарын,
Һаҡлаһалар бөгөн улдарын,
ЕГЕТТӘР ҘӘ БУЛЫР АҠҺАҠАЛ!

**АҠҺАҠАЛДАР ВАСЫЯТЫ!**



Урал батыр васияты:

Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ.



Мифтахетдин Аҡмулла васыяты:

Башҡорттарым уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр,
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр.



Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев васыяты:

Аҫаба башҡорт өс нәмәне:

- ырыуының шәжәрәһен,
- хандар тураһында риүәйттәрҙе, өләңдәрҙе,
- йондоҙҙарҙы танып белергә тейеш.



Әхмәтзәки Вәлиди Туған васыяты:

Милләтте тел, дин һәм ерҙәребеҙҙе һаҡлау йәшәтәсәк!



Нурыйәхмәт Ғатаулла улы васыяты:

Зәки Вәлиди – бөйөк шәхес!

Бер заман ул башҡорт халҡына кире ҡайтасаҡ!

Уҡығыҙ,

уландар,

уҡығыҙ!

Уҡығандың файҙаһы күп!

Рәми Ғәрипов васыяты:



Бел һин: мин үҙемә үҙем хаким,
Бер ҡасан да ғорур иркемде
Йәберһетер өсөн башҡаларҙан
Ҡулдарына бирмәм бер ҡасан!
Юҡ, мин түгел, иркәм, ундайҙарҙан,
Ул меҫкенлек – ҡолдар өлөшө,
Мин үҙ яҙмышыма үҙем хужа,
Бөтәһенән элек, мин – КЕШЕ!

Рәшит Әхтәри васыяты:



Төшөп ҡалғандарҙан
түгелбеҙ ҙә –
Йырығыҙҙан шыңшыу
сыҡмаһын!
Шыңшыу заман үҙе
илаҡлаһын –
Моңобоҙға морон
тыҡмаһын!
Төшөп ҡалғандарҙан
түгелбеҙ ҙә –
Гөл итәйек көлдәй ерҙҙәрҙе,
Шыйыҡ малайҙарҙан үҫтерәйек
Елле генә илле ирҙәрҙе!

Ризван Хажиев васыяты:



Данлы яҡташтарбыҙҙың
һүнмәҫ ҡаһарманлыҡтарына
беҙ ҙә тоғро булһаҡ, улар
күтәргән байраҡты ҡулдан
ысҡындырмаһаҡ,
Башҡортостан
халыҡтарының дуҫлығына
һәм татыулығына тап
төшөрмәһәк ине,
ырыуҙаштарым.

Ғәлимйән Кәримов теләге:

Йәш быуынды күренекле шәхестәр өлгөһөндә тәрбиәләйек.

Күренекле ауылдаштарыбыҙ, райондаштарыбыҙ – ысын мәғәнәһендә республика, ил үҫешенә тос өлөш индергән кешеләр.





Марат Ғафаров әйткәне:

Яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш ысулы бер генә – тәбиғәткә, башҡа кешеләргә ҡарата яҡшылыҡ, иҙгелек ҡылыу.




Рөстәм Нурыев әйткәне:

Балаларҙы ишәйтегеҙ – халҡым артһын,
Халҡымды ла уҡытығыҙ – ғилем артһын,
Ғилемлеләр тырышығыҙ – болы артһын,
Заманға күп ҡалмаған – әҙер булың...

Бәйләнеш:
Емайл rnuriev1@gmail.com
Фейсбук https://www.facebook.com/rustam.nuryev.7
Вконтакте https://vk.com/rnuriev1
ЮТУБ-канал
https://www.youtube.com/channel/UCCDxGfA1KjJo-XYQroe15EA/videos

## Ҡабат һуғыш ҡына булмаһын, уландар!

**Рөстәм ҒАТАУЛЛИН, Мәсетле районы:** «Ҡабат һуғыш ҡына булмаһын, уландар!» – тип Нурыйәхмәт ҡартатайым бик йыш әйтә ине. Атайымдың атаһы 1895 йылғы, оло йәштә булыу сәбәпле һуғышҡа 1941 йыл һуңында алына. «Максим» пулеметы расчетында ул беренсе номер, ә ауылдашы һәм кейәүе Сабирйән Хәйбуллин икенсе номер була. Улар уҡсылар дивизияһында алғы һыҙыҡта һуғыша. Алыш ваҡытында немецтар тәү сиратта пулемет расчетын сафтан сығарырға тырышҡан, уларҙы маҡсатлы рәүештә миномет утына тотҡан. Ошондай бер һөжүм ваҡытында ҡартатайым окопка сүгәләп өлгөрмәгән, унын янында ғына шартлаған минанан нык яраланған. Ярты йыл госпиталдә ятҡандан һуң, 1942 йылдың яҙында, ауылға ҡайтҡан. Һыңар ҡулының ҡулбаштан түбән һөйәге юҡ, мускулдарҙа ғына аҫылынып тора ине. Ҡабырға аша ҙур мина ярсығы үткән, арҡаһы ваҡ ярсыҡтар менән тулған. 60-сы йылдарға тиклем ул ярсыҡтар тәндән аҡрынлап сыҡҡан. «Ниместе беҙ ике һалдатҡа бер мылтыҡ, унар патрон менән еңдек бит ул» – тип һөйләгәне «Снайпер» фильмын ҡарағас, «ҡылт» итеп иҫкә төшкәйне. Һуғыштан ҡайтҡас, ферма мөдире, бригадир булып эшләгән. Көслөрәк ҡатындарҙан, өлкәнерәк үҫмерҙәрҙән «төңгө» бригада төҙөп, төндәрен Әй йылғаһында йылым менән балыҡ һөҙҙөрткән. Уны ауыл халҡына тараткан, күрше урыҫ ауылдарында картуфҡа һәм онға алмаштырған. «Шулай ауылды аслыҡтан ҡотҡарып ҡалды ҡартатайың», – тип күрше бабай һөйләгәйне.

Әсәйемдең атаһы, Рамазан ҡартатайым да оло йәштә була, һуғышҡа 1943 йылда алына. «Һуғыштың ҡыҙған мәлендә китәм, ҡайтыуҙары икеле», – тип әйтеп киткән. Шул уҡ йылдың йәйендә «Хәбәрһеҙ юғалды» тигән хат килгән. 90-сы йылдарҙа нәшер ителгән «Хәтер китабы» аша ғына Рамазан ҡартатайымдың юғалмағанын, ә 1944 йылда Польшала вафат булыуын белдек. Һуңынан, Оборона министрлығы архивтарын интернетҡа һалған

осорҙа, уның юғалыу һәм вафат булыу тураһындағы документтарын эҙләп таптым. Һуғыш яланында ҡайҙа ерләнгәнен, һуғыштан һуң ҡайҙа күсерелгәнен асыҡланым. 2017 йылда Казимиж Дольны ҡалаһындағы совет һалдаттары ерләнгән мемориалға барып, Рамазан ҡартатайымдың ҡәберенә Башҡортостан тупрағын һалып ҡайттым. Ундағы исемле һәр ҡәберҙе фотоға төшөрҙөм, Башҡорт Википедияһында мемориал тураһында мәҡәлә яҙып, фотоларҙы шунда ҡуйҙым. Казимиж Дольнылағы ҡәберлектә 8676 мәйет ерләнгән, ә Польшала ундай дөйөм ҡәберлектәр ҡырҡтан ашыу. Улар урындағы хакимиәт ҡарамағында, бик матурлап тәрбиәләйҙәр. Польшала Совет һалдаттарына ихтирам булмауы, һәйкәлдәрҙе емереүҙәре буш һүҙ. Тарихи һәм мәҙәни әһәмиәте, ниндәйҙер яу менән бәйле булмағандарын алалар. Әммә билдәле яу менән булғандарын ҡалдыралар, үҙ күҙҙәрем менән күреп ҡайттым. Ә үҙ илебеҙҙә һалдат мәйеттәрен яу яланынан йыйып бөтмәгәнбеҙ әле, шуныһы ҡыҙғаныс. Кеше күҙендәге сүпте бүрәнәләй итеү шулай була инде, уландар.

Аталары һуғыштан ҡайтмағандарға был һуғыш икеләтә-өсләтә ауыр булған. Улар үткән һуғыштың тере ҡорбандары. Үкһеҙ етем үҫкән әсәйемдең әсенеп һөйләгәндәрен бәйет итеп яҙғайным.

**Һуғыш ҡорбаны бәйете**

Етмеш биш йыл үтте бына,
Ҡәһәр һуғыш бөткәненә,
Бөтмәгән шул, минең өсөн
Әле һаман дауам итә.
Һәр йыл һайын Еңеү яҙын
Ҡабат халыҡ байрам итә,
Ә мин һүнмәҫ өмөт менән
Әтейемде яуҙан көтәм.

Бәғзе берәү майҙандарҙа,
«Ҡабатларға!» – оран һала.
Һорағанмы ҡорбандарҙан,
Еңеү хаҡы күпме тора?
Эй, кешеләр, байрамдарҙы
Сама менән байрам итең,
Иҫәбе юҡ етемдәрҙең
Һүҙен һеҙгә бәйән итәм.

Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ берҙә
Герман башлап һуғыш асҡан,
Барса халыҡ берҙәм булып
Ил һаҡларға яуға баҫҡан.
Һуғыш бит ул уйын түгел,
Аямаған кеше башын,
Етемдәрҙе зар илатып,
Ҡырған бит ул йәшен-ҡартын.

Оло йәшкә ҡарамаҫтан,
Әтейгә лә сират еткән,
Арҡаһына тоҡсай аҫып,
Ҡырҡ өстә яуға киткән.
«Һуғыштың бик ҡыҙған мәле,
Ҡайтыуҙары, һай, икеле,
Кеше ит, – тип, – балаларҙы»,
Әнейгә ул васыят әйткән.

Ябай һалдат елкәһенә
Күпме яфа-михнәт төшкән,
Меңәр саҡрым йәйәү үткән,
Тиҫтәләгән йылға кискән,
Тик Висланы сыҡҡан саҡта

Юраҡаны юшҡа килгән,
Ҡорбан булған әтекейем,
Ер ҡуйынын фатир иткән.

Төҫө лә юҡ хәтеремдә,
Сабый инем ул йылдарҙа,
Әтей ниндәй булғанын да,
Белдем күреп күршеләрҙә.
Әтекәйем, ник ҡайтманың,
Назға күмеп яратманың,
Байрамдарҙа күкрәк киреп,
Орден-миҙал сыңлатманың?

Ҡушҡаныңды үтәй алмай
Әней иртә үлеп китте,
Дүрт баланы – дүрт тарафҡа,
Әсе яҙмыш юлы илтте.
Һикһәнде лә уҙҙым инде
«Етем» тигән исем менән,
Ҡәһәр һуғыш беҙҙе лә бит
Тере килеш ҡорбан иткән.

Атайҙары ҡайтҡандарҙың
Тамағы туҡ, өҫтө бөтөн.
Хөкүмәттән тамып тора,
Еңел инде донъя көтөү.
Ауыр булды үкһеҙҙәргә
Ғаилә ҡороп, мандып китеү,
Үҙебеҙҙе генә түгел,
Балаларҙы кеше итеү.

Ин ша Аллаһ, бирешмәнек,
Илгә тоғро хеҙмәт иттек,

Теймәй кеше өләшөнә,
Ғәҙел генә ғүмер үттек.
Дәүләттән дә күрмәгәнде
Балаларҙан күрәмен.
Инәлмәйем, һорамайым,
Әммә теләк теләймен.

Оран һалған аңлаһын ул -
Киләсәктә һуғыштарҙы
Ҡабатларға яҙмаһын шул!
Ҡабатларға яҙмаһын!...
Һуғыш ҡорбаны бәйете
Етмеш биш юл көйләнде.
Яҙып алды ишеткәнде
Рөстәм – һалдат ейәне.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәһе, «Киске Өфө» гәзите, 8 май 2020 йыл, Өфө ҡалаһы.

## Ямандан башлау – яман!

15 февраль 2015 йыл. Айҙар Байыҡ исемендәге республика сәсәндәр бәйгеһенең «Бер тигәс тә ни яман» исемле беренсе тематик әйтешендә Нурбашҡорттың бәйгене башлап әйткән һүҙе: Әйтешкә һылтанма - https://vk.com/topic-87326626_31214697

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйтеш башлап китәйем.
Сәләмемде бирәйем,
Уй-фекерҙе һүтәйем.
Милләт өсөн һөйләйем,
«Еңәм!» – тип көсәнмәйем.

Дауам итеп һүҙемде,
Таныштырам үҙемде:
Ҡошсо – бабам ырыуы,
Салауат – уның ораны,
Муйыл була ағасы,
Аҡҡоштар – изге ҡошо.

Нурбашҡорт була атым,
Бирмәгән уны атам.
Донъя белһен башҡортто,
Алдым шул ҡушаматты.
Сәсән түгел исемем,
Булыр микән есемем?

Әйтеш сәләмдән тормай,
Дауам итеүҙе һорай.
Шиғыр юлдарын теҙеп,
Сәсән башлаған һүҙен.
Борондан килгән йола,

Ҡомары һуң ни тора!?

Бер тигәс тә ни яман?
Ямандан башлау – яман!
Көн һайын иҫкә алһаң,
Үҫә барыр ул һаман.
Шуға күрә мин борам
Һүҙҙе яҡшыға табан.

Урал батыр бабабыҙ
Изге һүҙен тыңлағыҙ:
«Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!»

Был милләттең ораны
Онотмағыҙ һеҙ уны.
Таный белең яҡшыны
Хурламайса башҡаны.
Ғәмәл ҡылып яҡшынан,
Юлын ябың шаҡшының.

Юғалтмағыҙ ҡиммәтен,
Йәшәйештең хикмәтен:
Донъя парлы булыуын,
Пар бөтөндө яһауын.
Пар тигеҙлегенә күрә
Бөтөн хәрәкәт бирә.

Яраштырһаң парҙарҙы,
Тыуа ерҙә бәрәкәт.
Ярыштырһаң уларҙы,

Илгә илтә һәләкәт.
Тигеҙ итең донъяны!
Яҡшынан һорап теләк.

Тормош барһын яҡшыраҡ!
Ә Әйтеш маҡсатлыраҡ!
Сәләмәт булһын тәнгә!
Тынғылыҡ булһын йәнгә!
Тыныслыҡ булһын илгә!
Шул теләгем бөгөнгә.

25 февраль 2015 йыл. Айҙар Байыҡ исемендәге республика сәсәндәр бәйгеһенең «Бер тигәс тә ни яман» әйтешендә Аҡһаҡ кейек сәсән (Ғүмәр Ғайсин) Нурбашҡортто юғалтыуы, унын әйткәненә Нурбашҡорттың яуабы:

Асыулы ағам яман!
Ҡулына ҡамсы алған:
– Хәҙер, – ти, – һине ярам!
Өндәшмәйһең ник һаман?!
Тынып ҡалһа был майҙан,
Ямандан булыр яман!

– Кисерһәңсе, һин, ағам, –
Әйткән инем иң баштан, –
Яҡшыға табан сабам,
Бихисап ул, мин табам.
Үсеп еткән йәш быуын
Улар эҙләй үҙ юлын!

Рухлы һәм дәртлеләр,
Емерәләр кәртәләр,
Яҡшынан яҡшы уйҙар

Эшкә ашһын, һай, шулар!
Булдырырҙар бер заман –
Яманға булыр ТАМАМ!

18 апрель 2015 йыл, «Бер тигәс тә ни яман» исемле әйтештә башҡорттарҙың яманын яманлаусы, йәштәрҙе яманлауға күсеп киткән сәсәндәргә Нурбашҡорттың әсенеп әйткәне, шул көндәрҙә үткәрелгән Вики-һабантуйға саҡырғаны:

Ә ҡайҙа һуң башҡорттар!?
Әйтһәм, тағы әйтәйем.
Ялҡыттығыҙ, ағайҙар!
Яҡшыны, тим, күрмәйһеҙ!
Шаҡшы эҙләп көн итеп,
Яман маҡтап ҙурлайһыҙ!
Иҫкә алғас бик йыштан
Үҫә тағы ул ҡуштан!
Урал батыр бабабыҙ
Өстән әйткән яҡшыһын!
(Васыятының һуңғы дүрт юлын уҡығыҙ)
Ә һеҙҙең һуң телмәрҙә
Уға урын ҡалмаған!
Туҡтағыҙсы аҡһарға,
Шешкә батып ятырға.
Китегеҙ һеҙ ямандан,
Дегәнәк баҫҡан яландан.
Заманында Сократ та
Йәштәр хурлап дан алған.
Әммә яман уңмаған
Донъя ла бит аумаған.
Беҙҙең йәштәр, афарин!
Атланғандар АРҒЫМАҠ!

Аңлы, Рухлы һәм Ғәмле,
Ырыҫ, Моң, Аҡыл, Ҡотло.
Килегеҙ шул яланға,
Башҡорттарҙы күрергә!
Оло байрам, кесе туй,
Була Вики-Һабантуй.
Йәштәр ҙә йыя майҙан
Салауат әйтәм уйҙан.
Форсат табып, бер ыңғай,
Телмәр тотоп маҡтармын,
Осоп китһен шоңҡарҙар,
Ҡая буштан тормаһын!
Эх, ағайҙар, апайҙар,
Был майҙан миңә ситән,
Шуға күрә тағы ла
Яҡшыны эҙләп китәм!

18 апрель. Аҡһаҡ кейектең (Ғүмәр Ғайсин) «Ҡурай» каналына зарланыуына, йыраҡта йәшәгәнлектән Вики-һабантуйға килмәгәненә аҡланыуына, БСТ тураһында һорашыуына Нурбашҡорттың яуабы:

Ҡарағандар даими
БСТ-ны, «Сәләм»-де,
«Телеүҙәк», «Яңылыҡ»
Арҡамдан һөйөп китә,
Һөйләгәс гел башҡортса,
Урыҫ телмәр ҡушмайса.
Йәһүд дуҫым сараға
Осоп килә йыраҡтан,
Әҙерләгән ул телмәр
Башҡорт телендә яттан.
Йөҙләп дуҫтар йыйыла,

Илдең тарафтарынан.
Үҙ башҡортоң ишетмәй,
Зар китмәгәс уйынан.
....
Әйтеш булды туҡмаҡтан,
Китәйем был һуҡмаҡтан.

Нурбашҡорттың әйтешкә тағы кире килгәне, әйтеш темаһын яҡшыға борорға өндәгәне:

Кире килдем һуҡмаҡтан,
Эште бер ҡый һуҡканмын.
Шатланып хәбәр һалам,
Башҡорттар берҙәм халыҡ!
Инет һалған оранға
Дуҫтар әүҙем ҡушылған.
Килде йәштәр ярҙамға,
Күҙгә йәштәр тулышҡан.
Мир шатланған саҡтарҙа,
Кемдер һаман зарлана.
Табып илар сәбәбен,
Ташлай яман хәбәрен.
Теләгән табыр яйын,
Эш ҡылыр аҙым һайын,
Яҡшынан уның аты
Яралар юлдың башын.
Сәсәндәргә хасмы ул,
Зарланған йырҙар йырлау?
Кәрәкме ул милләт өсөн
Яманға табан әйҙәү?
Уны мең тапҡыр әйтеү
Һис кәметмәй кимәлен.
Яҡшынан булһын әйтеш,
Табығыҙсы әмәлен.

19 апрель 2015 йыл, Нурбашҡорттың сәсәндәрҙе тағы яҡшылыҡ тураһында әйтешергә саҡырыуы:

Милләт үлмәҫ! Булған, бар һәм буласаҡ!
АРҒЫМАҠҠа атланып ул сабасаҡ!
Аңлы, Рухлы һәм Ғәмлеләр,
Ырыҫ, Моң, Аҡыл, Ҡот белгәндәр!
Сәсән-шағир булған һәр һәләтле,
Таратығыҙ халҡыбыҙға шул тәғлимәтте.
Белмәү түгел әлеге көн – иң яманы,
Теләмәгән белергә шул – иң наҙаны,
Бер ваҡыт та һуң булмаҫ ул ғилем эстәү,
Уҡыу кәрәк, башҡорттарым, көтмәй көсләү!
Милләтем һәр заманда булған Аңлы,
Таба ала Рухын һаҡлар сараларҙы,
Ғәмен ул ғәмһеҙҙәргә сарыф итмәй,
Ырыҫ менән күңелендә халҡым йәшәй,
Моңға һалып йырҙарында илен данлай,
Аҡыл менән ҡарарҙары һуғарылған,
Ҡото ла бит «байлыҡ» тип ҡурылмаған.
Эй, сәсәндәр, эсем тулы хис-тойғолар,
Әйтер өсөн был майҙандың сиктәре тар.
Килгән һайын үтенептер һорайымсы,
Кире һөйләп хәлһеҙләнеп ҡалмайыҡсы,
Алға ҡарап йышыраҡ һуң барайыҡсы,
Яҡшы яҡҡа һүҙҙәрҙе беҙ борайыҡсы!

Нурбашҡорт шулай тип әйткән дә, яманды яманлаусы әйтеш темаһын туҡтатҡан. Шеш (Низам Исхаҡов) сәсәндең Нурбашҡортҡа яуабынан һуң әйтеш туҡтап ҡалған.

## Йыһанға йышыраҡ ҡара!

20.06.2015, Салауат йыйыны, Малаяҙ ауылы, Салауат районы. Айҙар Байыҡ исемендәге республика сәсәндәр бәйгеһенең йомғаҡлау өлөшөнә саҡырылыуы.

Шылтыраттыҡ, белештек,
Күрешергә килештек,
Иртәнге сәғәт унда
Төп сәхнәнең уңында.
Кемдер килер иртәрәк,
Бәйгегә булып терәк,
Тел асҡыстарын теләп,
Әйтешеп алыу кәрәк!
Һеҙ ҙә, дуҫтар, килегеҙ,
Башҡорт барын белегеҙ,
Сәсәндәрҙе күрегеҙ,
Алҡыштарға күмегеҙ.
Башҡорттарым, килегеҙ!
Башҡорттарым, күрегеҙ!

## Салауат йыйынында сығыш яһап телмәр тотҡаны, Айҙар Байыҡ әйткәнен Рөстәм Нурбашы дауам иткәне

***Айҙар Байыҡ әйткәне:***
Йөҙ йыл буйы уйлаған,
Халыҡҡа шулай һөйләгән,
Ҡанға аунап эҙләгән,
Бер уйым бар тапмаған,
Һыуға ла төшөп аҡмаған,
Һаҙға ла төшөп батмаған,
Мин генә түгел эҙләгән,
Күптәр сапҡан, тапмаған.

Ул уйымдың эсендә —
Кәпләшеү түгел тарлыҡтан,
Зарлыҡ та түгел ҡартлыҡтан,—
Өнө сыҡмай ҡапланған,
Ил теләге ҡарлыҡҡан:
Өҫтө ҡанға тапланған
Ил теләге тарлыҡтан.

***Нурбашы дауам иткәне:***
Күптәр сапҡан, тапмаған,
Яуап һаман ҡалҡмаған
Бер туҡтауһыҙ яулашҡан
Илгә тынлыҡ ҡайтмаған.
Ике быуат һыу аҡҡан,
Ireккә лә ирешкән,
Тарлыҡҡа тағы килешкән,
Ете быуын алмашҡан.

Милләтемдең теләген
Тигеҙ итеп күргәнен,
Үҙенә тиңдәш иткәнен
Илгә килгән-киткәнен.
Ситтән яҡлау эҙләүен,
Яттан яҡлау тапмауын,
Ғәҙел өнө ҡарлыҡҡан,
Ишетелмәй тарлыҡтан.

Ундай уйҙы уйлаған,
Китап уҡып туймаған,
Хаҡикәтте үҙ иткән,
Яҙғанын да тапмаған,
Йыһанға ла ҡараған,

Ҡарап унан һораған,
Яуабын да алғанмын,
Алғас хайран ҡалғанмын.

Халҡымдың да йөрәген,
Телгеләгән теләген,
Әйтер өсөн тел биргән,
Һөйләр өсөн һүҙ биргән,
Ҡош теленә һүҙ төргән,
Аңлар уны тел белгән,
Белергә тел ҡәҙерен,
Ҡабат-ҡабат өндәймен.

Йыһандың оло ҡөҙрәтен,
Кеше шунан төшкәнен,
Һуңынан ситкә типкәнен,
Ялған юлдан киткәнен,
Ғәҙеллектең бөткәнен,
Йыһан һаман көткәнен,
Милләтемдең мөлләтен,
Үтәр мөҙҙәт еткәнен.

Яңы быуат бәйетен
Эҙмә-эҙләп биргәнен,
Милләт серен сискәнен,
Әҙер бул, – тип әйткәнен.
Әтейғолдо күргәнен,
Һорағаны белгәнен,
Унан сәләм алғанын,
Ваҡыт бик аҙ ҡалғанын.

Әйтер һүҙем бөтмәгән,
Сыҙамаҫ тик көтмәгән,

Изге юлдан юлланған,
Уралтауҙы иңләгән,
Үҙен тиңгә тиңләгән,
Улы ситкә китмәгән,
Ҡыҙын ятҡа бирмәгән,
Халыҡ булыр бөлмәгән.

Урал батыр васыятын
Теүәл үтәп бурысын:
Кеше булыр затыбыҙ,
Яҡшылыҡ булыр атыбыҙ,
Яманға юл ҡуймабыҙ,
Яҡшынан баш тартмабыҙ,
Ҡан сығармай яу баҫыр,
Яман яҡшынан ҡасыр.

Башҡорттар!
Асылыбыҙ шул була!
Яҡшылыҡты яҡларға!
Аңлатырға яттарға!
Аҙашҡандар һул яҡҡа!
Һуңғылар булыр алда!
Бора алһаҡ уңға табан,
ТәҡдиреҢ шулай ҡушҡан,
Йыһанға йышыраҡ ҡара!

Суфый бабай бүләһе
Улына бәйет әйткәне,
Яҙып алды ишеткәнде
Рөстәм Нурый ейәне.

**Яңы быуат бәйете**

Мөғжизәләр менән тулы фани донъя,
Телһеҙҙәр ҙә телмәр тота булып даръя.
Тормағандар атлап китә, Хоҙай ҡушһа,
Әйткәнемде яҙып бар, тип, миңә ҡуша.
…Ер йөҙө бит бер мөғжизә – шул яуаптыр,
Фаразлайҙар ул барлығын меӊ быуаттар.
Бихисапһыҙ мәхлүк йәшәй тәбиғәттә,
Ышанмай тик кеше генә тәғлимәткә.
Үҙен үҙе бөтөрөргә гел баш вата,
Һинең халҡың яһамай тик ундай хата.
Еткерергә уға шуға үтенесем
Сабыр бул һин һәм бул һин телсем.

Сабыр бул һин, сабырлыҡтың төбө – алтын.
Боронғолар юҡка ғына әйтмәгәндәр.
Олтанлыҡты солтанлыҡтан өҫтөн күреп,
Үҙ илендә сабыр ғына көн иткәндәр.
Әмир, батша һәм түрәләр килгән-киткән,
Заманында Алтын Урҙа хатта бөткән.

Тик йәшәгән ырыу-ырыу аҡ бабалар,
Үҫтергәндәр һинең кеүек ир балалар.
Кәрәк булһа, илен яҡлап яу сабырлыҡ,
Форсат сыҡһа, ерен данлап моң һалырлыҡ.
Батшаларға баш эймәгән һинең ырыу,
Сабыр бул һин һәм бул һин ғорур.

Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең балалары
Мең быуаттар төйәк итте Урал ташын.
Һыйҙырғанда үҙ янына башҡаларҙы,
Һөмһөрөн ҡойоп йыйырманы бабаң ҡашын.
Ғорурлығын бер ваҡытта юғалтманы,
Хужа булды, донъяларҙы тарҡатманы.
Аңлағандар бабаңдың был сәйәсәтен
Алмаштырҙы уға ҡарап үҙ йәһәтен.
Ҡабул итте ырыу тотҡан ғөрөфтәрҙе,
Ә халҡыңа тағы бик күп бәҫ өҫтәлде.
Улыңа ла еткер минең әйкәнде, ай,
Сабыр бул һин һәм бул һин атай.

Кәмһетәләр мине, тип, һәр ваҡыт та
Йәберләмә һин үҙеңде бер саҡта ла.
Йүләрлектән өҫтөн булған кеше генә
Бөйөк һәм саф күңелле була ала.
Яйлап ҡына үҙеңә тиң дуҫ-иш һайла,

Дуҫлыҡ беҙҙең мәңгелек, тип оран һалма.
Аллаһ ҡына мәңгелек бит был донъяла
Башҡа нәмә тарих саңы булып ҡала.
Донъя баҫҡан дәүләттәр ҙә тарҡалалар,
Бәғзе халыҡ ҡыҙыу булып юҡ булалар.
Күрше булған ғуҙ һәм хаҙар быға миҫал
Сабыр бул һин һәм бул һин уҫал.

Берҙәй ҡарай көнсығышҡа, көнбайышҡа ике башы,
Һине арбап, тарих яҙа сәмер ҡошо.
Фәһемле тип, уҡыма тик бер китапты,
Эҙлә, тап, сағыштыр бар сығанаҡты.
Ата-бабаң булмышы күп шәреҡтә лә,
Онотһон тип, бәғзе берәү теләһә лә.
Ике тапҡыр хәрефеңде алмаштырған
Өсөһөн дә өйрән, һин отолмаҫһың.
Быңдай бәхет бер кемгә лә тәтемәгән.
Зәки бабаң Бохарала күп эҙләнгән.
Ул тапҡанды тағы ла һин нығыраҡ байыт,
Сабыр бул һин һәм бул һин талип.

Белһен өсөн барса ғаләм барыһын да,
Иҫбатлансы йән иҫәбе барышында.
Бурҙар «Һин бур», – тип, тамаҡ яра, аптырама,
Харамдыҡы харам инде, эсен ҡыра.

Хәләл генә һәр ваҡытта көстә ҡала,
Бер тибәрһең ундайҙарҙың арт һанына.
Ата-бабаң хәреф танып намаҙ ҡылды.
Наҙан ғына: «Наҙандар», – тип һөрән һалды.
Уҡымышлы булды һәр саҡ барса халҡың,
Шул кимәлде күтәрергә барсы хаҡың.
Уҡы, улым, ярҙам итәм, килә хәлем,
Сабыр бул һин һәм бул һин ғалим.

Монгол менән килгәнде лә һин ҡурсала,
Уны ла бит кесе айыу ҡыҫып бара.
«Күп мин», – тип, бөгөнгө көн маһайһа ла,
Йота алмаҫ мишәрҙе лә, майлаһа ла.
Йәш бит әле, ул да аңлар бара-бара,
Ҡыҙыу халыҡ тиҙ тарҡала был донъяла.
Дыуамалдар алған саҡта ләззәт тапһа,
Олпатлылар ҡуйғас ҡына йәннәт ҡыла.
Юҡ бит уның һыйынырлыҡ ере башҡа,
Аңлағаны һиңә ҡарап күҙен баға.
Рәхмәтлеһе бик күп улар араһында,
Сабыр бул һин һәм бул һин уға аға.

Ҡояшта бит үтә ҡыҙыл – бик тиҙ уңа,
Ҡыҙыу кеше һәр ваҡытта боҙҙай туңа.
Ғалимдар ҙа күптән инде иҫбат иткән

Нәфсе тигән яман сирҙе, шуға икән.
Үткән быуат бар донъяны дер һелкеткән,
Айыуҙың да бөгөн килеп хәле бөткән.
Башлағанды Барый батша үткәнендә
Тамаларҙар һинән башҡа үҙҙәре лә.
Йөҙ йыл элек суфый бабаң яҙып ҡуйған,
Уландарым, сабыр булың, килер заман.
Шул яҙманы алыр өсөн бөгөн уҡый,
Сабыр бул һин һәм бул һин суфый.

Ҡара алтын бәҫе китер баҙарҙарҙа,
Ҡап ҡорһаҡтар бет үрсетер ул сағында.
Ерле генә ерҙә ҡаты баҫып торор,
Кемлегеңде барһы күрер шул саҡтарҙа.
Ата-бабаң ерҙе тотҡан ырыу менән,
Шуға тағын бөгөнгө көн яйы килгән.
Ҡабыҡ һуғып, сәүкә ҡыуып дау күтәрмә,
Ҡанун менән ал ҡулыңа үҙ ереңде.
Ата ла ул, әсә лә ул – ерең һаҡла,
Баҙар хаҡы текә тиеп, уны һатма,
Ерең булһа, балаларың күрмәҫ нужа,
Сабыр бул һин һәм бул һин хужа.

Байлыҡ тиеп, ҡыуалама донъя атын,
Күрһәтер ул, ҡабаланһаң, һиңә артын.

Һаулыҡтан да ҡимматерәк юҡ донъяла,
Ҡыйылмаһын кеше ғүмере бер заяға.
Үҙгәрештәр була ала ҡанһыҙ ғына,
Низағ эштәр хәл ителһә сабыр ғына,
Һәр бер низағ тамамлана солох менән,
Айырмаһы ҡорбан иткән дәүмәл икән.
Туған менән тапҡаныңды тоғро бүлеш,
Ҡылығыңдан рәнйемәһен күрше-белеш.
Еткерергә үҙ халҡыңа былдай сәләм,
Сабыр бул һин һәм бул һин сәсән.

Аҡыл менән эш итергә һәр заманда
Васыят итә суфый бабаң яҙмаһында.
Көслөнөкө көслө генә булған саҡта
Аҡыллының ике илле өҫтөн ята.
Зыялылар йыйылышып кәңәш итәр,
Юлың уңыр халҡың менән, илсе ебәр
Милләттәрҙе берләштергән ойошмаға,
Ул тарафта көслө лә бит ҡойолоп ҡала.
Килер заман, иншаАллаһ, күп ҡалмаған,
Ул юҫыҡҡа бәғзе халыҡ һуҡмаҡ һалған.
Донъяла ла яңы быуат инде хәҙер
Сабыр бул һин һәм бул һин әҙер…

Өфө, июль, 2010 йыл.

**4-се Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында әйткәне**

Һаулыҡта бул, оло ҡор!
Делегаттар, ҡунаҡтар,
Милләттәштәр, башҡорттар,
Илдә барса халыҡтар!
Мәртәбәле был көндә
Яуаплы булып илгә,
Бурыстар элгәс иңгә,
Әйтер һүҙем бар һеҙгә.

Делегаттар, ҡунаҡтар!
Булмағыҙ тик шаһиттар,
Ҡор үтте лә эш бөттө, тип,
Артабан һеҙ уйламаң.
Биш йыл буйы вәкәләтте
Мотлаҡ, ғәҙел үтәгеҙ,
Халыҡ менән беҙ берлектә,
Һеҙҙән шуны көтәбеҙ!

Милләттәштәр, башҡорттар!
Әйтер һүҙем шул булыр:
Урал батыр васыятын,
Ҡабат- ҡабат уҡығыҙ,
Балалар белеп үҫһен,
Уларға ла тылҡығыҙ:
Бабабыҙ әрсегән Ерҙә,
Кешегә байман табайыҡ,

Юл башында баш булып,
Кешегә ил ҡорайыҡ.
Тиңдәр менән тиң булып,

Татыулыҡта торайыҡ.
«Яҡшылыҡ булһын атыбыҙ,
Кеше булһын затыбыҙ;
Яманға юл ҡуймайыҡ,
Яҡшынан баш тартмайыҡ!»

Илдә барса халыҡтар!
Һеҙгә лә әйтер һүҙем бар:
Ихтирам ит үҙеңде,
Ихтирам ит күршеңде,
Дуҫлыҡта һәм муллыҡта
Татыу тормош көтәйек,
Уралдағы Илебеҙҙе,
Ожмах тиңе итәйек!

Эй, кешеләр, фәһем ал!
Йыһан биргән аҡылдан,
Сәсәндәрҙең телмәрендә
Күп тапҡырҙар атылған:
Иң мөһиме был Ерҙә
Тәбиғәт булыр, берҙән.
Сама менән тотонғанды,
Теләй ул һәр саҡ беҙҙән.

Өфө, 2015 йыл.

«Һуң түгелдер…» төркөмөндә яҙылған шул,
Насип Һаҡмар исеменән ҡуйылған шул,
Сәсәндең дә күҙе үткер, теле тапҡыр,
Заман зарын һөйләгән ул, эҙләп батыр.
https://vk.com/wall-63468987_415

***Насип Һаҡмар әйткәне:***

**Башҡортостан**

Оборона тота бөгөн Башҡортостан,
Ябырылған төрлө яҡтан уға дошман.
Бераҙ талай нефть, газын һәм урманын,
Асмаҡ була Торатауҙың аҡ юрғанын.

Икенсеһе тәхетенә менеп алып,
Һалмаҡ була арҡаһына, аяҡ салып.
Тартып алмаҡ Зәйнуллаһын, ҡурайын да,
Бай тарихын, йондоҙҙарын һәм айын да.

Башҡортостан – һыңар боксер бирсәткәһе,
Һыңар ҡуллап ҡына яҡлай истәк йәнен.
Икенсеһен шаҡарғандар эпкәләйҙәр,
Арттан ғына йомшаҡ ерен типкеләйҙәр.

Ҡолаҡ, телен һәм танауын ҡырҡмаҡ булып ,
Мөһөр баҫып , баш эйҙереп тотмаҡ булып.
Рәсәй – әсәй ыуын сәсә, ярһый, сәсәй,
Ата-бабам барып ҡапҡан матур тәсәй.

Башын бирмәй үрһәләнә Башҡортостан,
Һатлыҡ йәндәр дилбегәһен ҡоршап тотҡан.

***Нурбашының дауам иткәне:***

**Заманаға әҙер бул!**

Башын бирмәй үрһәләнә Башҡортостан ,
Һатлыҡ йәндәр дилбегәһен ҡоршап тотҡан…
Ниәттәре әммә ләкин эшкә ашмаç,
Ғорур халҡым бер ваҡытта башын баçмаç.

Хан-батшалар, сәркәтиптәр килгән-киткән,
Башлыҡ та бит ваҡытлыса башлыҡ икән,
Иләймәндәр тыуыр илдә – ваҡыт еткән,
Заманаға күп ҡалмаған – зарығып көткән.

Халҡыма ла килешмәç тик көтөп ятмаҡ,
Асылын да beләһе бар эҙләп тапмаҡ.
Мәкерлеләр низағтарға тапай һуҡмаҡ,
Зинһар, халҡым, ярһыма һин улар һымаҡ.

Йөҙ йыл элек Зәки баба беҙгә әйткән,
Әпкәләйҙән эскерһеҙлек көтмә, тигән.
Ерҙе, телде, динде һаҡлау йәһәтенән,
Аҡыл менән эш итергә васыят иткән:

Балаларҙы ишәйтегеҙ – халҡым артһын,
Халҡымды ла уҡытығыҙ – ғилем артһын,
Ғилемлеләр тырышығыҙ – болы артһын,
Заманға күп ҡалмаған – әҙер булың...

Интернет, 2017 йыл

**Сама белеп йәшә, кеше!**

«Һуң түгелдер…» төркөмөндә
Был хәбәрҙе уҡыным,
Күңелемдә яуап тыуҙы,
Икеһен дә тылҡыйым.
https://vk.com/wall-63468987_544

Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Мостай Кәрим шиғырына
**Насип Һаҡмар былай яҙа**:
Мостай ҡайыны ла ныҡ ҡартайҙы,
Тамырҙары кипте, һулыны.
Ел-дауылдан ботаҡтары һынды,
Кәкерәйеп ҡалды олоно.
Нух заманғы йәшел сағын иҫләп,
Һаман бөйөк булып ҡылана.
Хәлкәйҙәре генә, ай, самалы,
Йонсоп ҡына шунда тын ала.
Елберләгән була сырхау япраҡ,
Осоп китмәҫ тимә дауылда.
Япраҡтарға нимә ҡала инде?
Ҡайын үҙе тора ауырға...
Эре -эре ҡорттар баҫып алды,
Үрмәкестәр һуҙҙы ауҙарын.
Ҡартайыуын һиҙмәҫ олонона
Япраҡтары ҡарай ялбарып.
Ел-дауылдар ҡубып ҡына тора,
Япраҡ кибә, өмөт өҙөлә.
...Тәбиғәттең беҙҙә эше лә юҡ.
Инеп бара илаҡ көҙөнә.

**НУРБАШЫның уға әйткәне:**

...Тәбиғәттең беҙҙә эше лә юҡ.
Инеп бара илаҡ көҙөнә.
Дүрт миҙгеле йыл да ҡабатлана,
Рәхмәт кенә яуһын үҙенә…

Ҡоро ҡайын ҡолап серей,
Япраҡтары булып тупраҡ,
Алмашына тағы имән үҫә,
Яңғыҙ түгел – үҫә сауҡалыҡ.

Шул сауҡалыҡ итеп күрәм,
Донъя картаһында илемде,
Оло булмаһаҡ ни, түгелбеҙ кәм,
Тигеҙ итеп тоям үҙемде.

Яҡшы-яман, көндө-төнгә ялғап,
Ҡаршылыҡтар тормош тигеҙләй,
«Сама белеп йәшә, кеше», тип,
Быуаттар бит беҙҙе өгөтләй.

Заманаһы үтер – ҡоро ҡайын ҡолар,
Япраҡтары ҡалыр тарих саңында,
Тәбиғәт тә көҙө-ҡышы аша үтеп,
Сәскә атыр тағы яҙында.

Интернет, 2018 йыл

**Шаһтауҙың әйткәне…**

Эй, ҡапҡорһаҡ-ҡапҡорһаҡ,
Эсең тулы буҡ турһыҡ,
Нәфсең ҡасан тыяһың –
Бар халыҡты зар илатып,
Ҡуштауға ҡул һуҙаһың.
Тауҙар майын ситкә һатып,
Офшорҙа мал йыяһың,
Мең йәшәмәк булаһың.
Мең йәшәмәк булырһың,
Бел, ахырҙа зат-ырыуың
Бахыр булып ҡалыр һуң.

Шихан тауҙар – Ер терәге
Миллион йыл тора баҫып,
Тауҙар бөтһә, күк ишелер
Ҡоро ерҙе һыу баҫып.
Байлыҡ өсөн ерҙе һатҡан
Әзрәкәләр дау һала,
Иләймәнһеҙ илдә торған
Халыҡҡа һуң ни ҡала,
Сабыр ғына донъя көткән
Халыҡҡа һуң ни ҡала?

Шихандарҙың араһында
Мин дә күркәм тау инем,
Шаһтау ине исемем,
Күк терәүе – есемем.
Бергөн килеп шартлаттылар,
Ҡәһҡәһәләр ҡыуанды:
Тауар итеп һатты тауҙы,
Илдә һаҫыҡ күл ҡалды,

Күлгә ҡасып сир ҡалды,
Күҙ күрмәгән сир ҡалды.

Күлдәр – Шүлгән донъяһы ул
Зыян итә еҫе лә,
Ҡартлыҡ килмәй гүргә инә
Уҙаманы, йәше лә.
Йыл да тыуған батырҙар ҙа
Батыр булып үҫмәйсе,
Илен яҡлап, майҙан тотоп
Сәсән кәңәш әйтмәйсе.
Сәсәндәр һүҙ әйтмәһә,
Золом илдән китерме,
Илгә ирек килерме?

Зәрҡүм менән Ҡатилдар
Ялған һөйләп ил һата,
Яңы быуын үҫкән һайын,
Яйын табып яу аса.
Яу булмаһа, йотҡа һалып,
Эсә ҡанын халыҡтың.
Ер елеген көн-төн һурып,
Ситкә ташый байлыҡты.
Ситкә ташып, байыҡты
Талап илде, халыҡты,
Туя алмай ҡаныҡты.

Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмарҙы,
Әй, Үҙәнде, Иҙелде
Күпме ерҙән быуҙылар,
Халҡын ярҙан ҡыуҙылар.
Эсәр һыуҙар болғанды,
Күлдәргә тик көн ҡалды.

Күлдән һыуҙы эсмәҫкә,
Яманға юл бирмәҫкә,
Илдә байман табырға
Ҡушҡан Урал бабағыҙ.
Батыр Урал бабағыҙ
Уландары, һеҙ ҡайҙа?!

Яҡшылыҡты ҡурсаларға
Батыр илдә ҡалғанмы?!
Тор, Уралым, тор, батыр,
Йәншишмәнән һыу бөркәм,
Шахтау өсөн ҡон ҡайтарыр
Фатихам бар, мин көтәм.
Булатың ал ҡулыңа,
Атлан Аҡбуҙ атыңа,
Яманлыҡтан ыҙа сиккән
Ярҙам ит, һин, халҡыңа.
Ярҙам ит, һин, халҡыңа!

Вконтакте, 20.02.2020

## Ниңә Интернетта һин һаман?

«Башҡорт теле» көнөнә бағышланған шиғри-әҙәби сарала һөйләгән, бөйөк шағирҙар әҫәренә ҡушып үҙем яҙған шиғырлы телмәр:

Булған борон замандар,
Ташҡа соҡоп яҙғандар
Шиғырҙарын шағирҙар.
Шунан килгән замандар,
Аҡ ҡағыҙға яҙалар
Шиғырҙарын шағирҙар.
Әле тыуҙы замана,
Интернетта була яҙырға
Шиғырҙарын шағирға.

Һорағайны бер шағир ағай:
Интернет бит – ул яман,
Шаҡшы тулған, ай-һай-һай,
Ниңә ундаһың һин һаман?
Кемгә нимә күренә,
Гөл-баҡсаны мин күрәм,
Яуап бирҙем ағайға
Әнгәм шиғыры менән:
Мин был донъяны матурларға тыуҙым,
Таҙартырға тыуҙым,
Йыйын хәшәрәттән, шаҡшынан,
Һәм төҙөргә уны мәңгелеккә,
Тик гүзәлдән, ныҡтан, яҡшынан.

Бына инде ун биш йыллап
Башҡорт телен яҡшы ҡурсалай,
Вики тигән оло майҙан,
Шағирәләр ыңғай баһалай.
Вконтакте, 14.12.2020

**Башҡорт Википедияһына — 10 йыл!**

18-04-2015. Тамара Искәндәриә.

Башҡорт Википедияһы —
Ниндәй ғорур яңғырай!
Бынан һуң яңғыҙ булмабыҙ,
Булмабыҙ һис яндырай!
Булмабыҙ беҙ үҙен-үҙе
Кәмһеткән ялҡау халыҡ.
Милләтте күтәреүсе ул —
Википедиясы Алып!
Юғалмаç башҡорт, танытһа
Киң донъяға үҙ йөҙөн.
Азат,
Илһамлы
Илһөйәр
Еткерер башҡорт һүҙен!

**Башҡорт Википедияһының юбилейы**
19.04.2015. Фирүзә Абдуллина.

Ул бәләкәй әле…
Ун йәш кенә!
Ләкин ниндәй ҡөҙрәт ҡулында!
Күптәр уға мөрәжәғәт итә,
Маяҡ итеп барыр юлында.

Һәр кем уны үҫтерергә хаҡлы,
Битарафтар ғына ситтәләр,
Зыялылыр бында һәр кешенең
Күңел ҡылдарына сиртәләр!

Ил яҙмышы һине борсой икән,
Телең өсөн әгәр көйөнһәң,
Үҙ халҡыңдың һәр бер ҡаҙанышы,
Уңыштары өсөн көйөнһәң –
Һинең урын бында!
Рәхим итеп,
Ҡалдыр әле һин дә эҙеңде!
Халҡың, илең өсөн кәрәк итеп
Тойорһоң һин шул саҡ үҙеңде.

Башҡорт Википедияһы — беҙҙең тарих,
Теләмәйбеҙ халыҡ бөлгәнде,
Үҙе эҙләгәнде табыр өсөн
Һәр кем яҙһын үҙе белгәнде!

Берләшәйек оло эштәр өсөн,
Тупланайыҡ булып оло күс!
Башҡорт Википедияһы, тупла беҙҙе!
Башҡорт Википедияһы, йәшә, үҫ!!

**Рөстәм Нурыевҡа**

Фирүзә Абдуллина шиғыры, 2016 йыл

Тормош үрен байтаҡ үрләгәнмен,
Оҙон ғына юлдар үтелгән,
Ғүмер йомғағымдың мул өлөшө
Теләйемме-юҡмы – һүтелгән.

Кешеләрҙең ниндәйҙәрен генә
Осратманым ошо юлымда!
Кемдәрҙәндер йәндә йылы ҡалды,
Кемдәрҙәндер – бысраҡ усымда.

Төрлөләре булды. Дуҫтар булып
Күңелемә күптәр үрләне,
Әммә ләкин һинең кеүек кеше
Булмағандыр минең күргәнем.

Беләм, маҡтағанды яратмайһың,
«Ҡуй сәле!»- тип һелтәп ҡулыңды…
…Һин алмашсы итеп үҫтерәһең
Ейәнсәрең, ҡыҙың-улыңды.

Үҙең кеүек иңлас кейәүең дә!
Ҡатыныңа күҙҙәр теймәһен!
Һин, моғайын, тыуған сағыңда уҡ
Кейгәнһеңдер бәхет күлдәген.

«Буштың атаһы үлгән,»- тиһәләр ҙә,
Аптыратып, бушҡа эшләйһең,
Үҙең өсөн түгел, халҡың өсөн,
Илең өсөн эшләп йәшәйһең.

Ял көндәре тимәй, төн йоҡламай,
Күтәрәһең һаман башҡортто,
Бер үҙеңә йөкмәп оло йөктө,
Данлайһың һин һаман баш йортто!

Һоҡланыуым сикһеҙ. Һинән күреп
Өлөшөмдө мин дә индерәм,
Һинең йөктө еңеләйтер өсөн
Башҡаларҙы әйҙәп, күндерәм.

Википедияның ирекмәне,
Һин – халҡыңдың осор ҡанаты,
Салауаттай батыр башҡорт улы,
Арыу-талыу белмәҫ йөк аты!

Эйе, һин йөк аты. Арбаң тулы
Халҡың борсоуҙары өйөлгән,
Бармы икән тағы һинең кеүек
Ил-тел өсөн янған-көйөнгән?

Эйәрт башҡаларҙы, алға әйҙәп,
Халҡың күңеленә нур өйөп!
…Илдең тарихына алтын менән
Яҙыр инем: РӨСТӘМ НУРЫЕВ!!!

**Пушкинаға оҡшатып...**

Туған телем тыуған еремдә,
Яңғыраһа мәңге йыр булып,
Һис үкенмәç инем, гүремдә
Ятҡанда ла ҡара ер булып.
(Рәми Ғарипов)

Мин телемә һәйкәл ҡуйҙым,
Интернеттың ҡая ташында,
Яһилдарҙың буйы етмәç,
Ҡолатырға булһа уйында.
Өләсәйҙәр ул һәйкәлгә ҡойҙо
Миллионлаған һүҙҙәр теҙмәһен,
Ейәндәре телде өйрәнәләр!
Үсләшкәндәр, әйҙә, түҙмәһен.
Донъя киңлегендә баçып тора
Туған телгә ҡойған һәйкәлдәр,
Шул һәйкәлдәр араһында
Минең телемә лә урын бар.
Рәми ағай, тыныс йоҡла,
Гүрҙәреңә яҡты нур тулып,
Туған телең тыуған ереңдә,
Яңғырар ул мәңге йыр булып.

Вконтакте, 19.02.2021

## «Тәҙрә уйыусы»ларға «тар ярыҡтан» ҡараш, йәки Ябай башҡорт уҙаманының уйланыуҙары

Тел ғалимы, яҙыусы Зиннур Ураҡсиндың «Ватандаш» журналында баҫылған «Тәҙрә уйыусы» исемле әҫәре тыуған телем – башҡорт теле – тураһындағы күңелемдәге булған уйланыуҙарымды яңынан ҡуҙғатып ебәрҙе. Яҙыусы әҫәрендә тәүге башҡорт алфавитын төҙөүсе, телсе-врач, күренекле дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтхан Ҡулаевтың тормош юлын һүрәтләй. Әҫәрҙең төп ораны итеп «Халыҡҡа яҙыу тәкдим итеү – ул бит яңылыҡҡа, яҡтылыҡҡа күҙен асыу, тәҙрә уйыу» фекере ҡулланыла.

Башҡорт халҡының өйрәнелмәгән, күп кешегә билдәле булмаған тарих биттәре бихисап. Был йәһәттән «Тәҙрә уйыусы», әҙәби әҫәр булыуына ҡарамаҫтан, бөгөнгө һәм киләсәк быуын эҙләнеүселәре өсөн йүнәлеш биреүсе сығанаҡ булараҡ иғтибарымды йәлеп итте. Мине лә башҡорт халҡы һәм башҡорт теле тураһындағы фекерҙәр борсой, бала саҡта аңыбыҙға һеңдерелгән тәғлимәттәрҙең ҡайһы берҙәре ысынбарлыҡҡа тап килмәүе шикләндерә.

XX быуат мәктәбендә Ҡарасай инҡилабы (Октябрь революцияһы) «ҡырағай» башҡорт халҡына үҙ әлифбаһын булдырырға мөмкинлек биргән, уны «наҙанлыҡтан» ҡотҡарған» тип уҡыттылар. Әммә, 1940 йылда индерелгән урыҫ һыҙмаһындағы (кириллица) яҙмаға тиклем, латин һыҙмаһындағы (латиница) хәрефтәр булыуын, унан да алда Рәсәйҙең төрки телле халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар, ғәрәп һыҙмаһын (арабица) ҡулланыуҙары тураһында өндәшмәнеләр. Бөгөн дә бының тураһында белеүселәр һирәк, сөнки өсөнсө-дүртенсе быуын башҡорттар урыҫ һыҙмаһындағы әлифбә ҡулланып белем ала. Бер-бер артлы яңы әлифба индереп, тотош халыҡтарҙы яһалма рәүештә «наҙан» һәм «ҡырағай» яһағандар, унан һуң «наҙанлыҡтан» «ҡотҡарғандар» булып сыға түгелме? 1917 йылғы

инҡилабҡа тиклем баҫтырылған сығанаҡтар менән танышҡас, шикләнеүҙәремдең урынлы булыуына төшөндөм.

Ерле хакимиәт (земство) идаралығы 1913 йылда Өфө вилайәтендәге (губерния) мосолман белем биреү усаҡтарын махсус рәүештә өйрәнгән. Был эштең һөҙөмтәһен идаралыҡтың мәғариф бүлегендә эшләгән, М. Обухов «Өфө вилайәте мәктәптәре» [Мектебе Уфимской губернии, Уфа, 1915] исемле әҫәрендә тасуирлай. Вилайәт биләмәһендә 1912–1913 уҡыу йылында 1579 мосолман (башҡорт һәм татар) мәктәбе булған, унда 90936 бала белем алған. Мәктәптәрҙән башҡа, өйҙә белем биреү усаҡтары 1045 урында теркәлгән. 285 мәктәптә (1579-ҙың 18,1 проценты) тик дини белем биреү, ә ҡалған мәктәптәрҙә (81,9 проценты) дини белем менән бер рәттән төрлө фәндәр уҡытылыуы асыҡланған. Мосолман мәктәптәренең хөкүмәт йәки ерле хакимиәт ҡаҙнаһынан аҡса алмауҙарын, тик урындағы халыҡ иҫәбенә генә көн күреүҙәрен М. Обухов айырым әйтеп үтә. Шул уҡ ваҡытта, ерле хакимиәт ойошторған башланғыс мәктәптәрҙәге уҡыусылар (1915 йылдың 1 ғинуарына – 101537 кеше) иҫәбенең 68,5% – урыҫ, 14,5% – башҡорт һәм татар, 17% – башҡа милләт вәкилдәре булыуын күрһәтеп, Обухов Рәсәй хөкүмәтенең милли сәйәсәтен тәнҡитләй, вилайәт етәкселеген урындағы халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡларға өндәй. Алдынғы ҡарашлы белгес был мәҡәләһе өсөн вилайәт хакимы (губернатор) Башилов тарафынан эҙәрлекләүҙәргә дусар була. Мәсьәләнең сәйәси яғын ситкә ҡуйып, ерле хакимиәттең башланғыс (14723 бала) һәм башҡорт, татар мәктәптәрендәге (90936 бала) мосолман уҡыусыларының дөйөм һанын (105659 бала) иғтибарға алып үтәйек.

XX быуат башында Санкт-Петербургтан килгән ғалим, сәйәхәтсе һәм яҙыусы М. Круковский ғилми эҙләнеүҙәр менән Көньяҡ Урал биләмәләрендә, башлыса тау һәм ялан башҡорттары йәшәгән ауылдарҙа, йөрөгән. Күргән-белгәндәрен, тәьҫораттарын «Көньяҡ Урал» китабында яҙып ҡалдырған. М. Круковский

яҙырға һәм уҡырға белмәгән бер генә башҡортты ла осратмауын, бының сәбәбе бөтә ауылдарҙа дин әһелдәренең мөғәлимлек менән дә шөғөлләнеүҙәрендә икәнен асыҡ әйтә.

Тағы ла башҡорт яҙыусыларының XIX быуат аҙағы – XX быуат башын сағылдырған әҫәрҙәренә иғтибар итәйек. Ниндәй генә әҫәрҙе алмайыҡ, шул иҫәптән «Тәҙрә уйыусы»ла ла, бер үк күренеш: балалар үҙ ауылдарында муллаларҙан «әлепте таяҡтан айырырға», йәки, ғилми төшөнсәләр менән әйткәндә, ғәрәп һыҙмаһын ҡулланып яҙырға һәм уҡырға өйрәнәләр.

Был сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәр халҡыбыҙҙың белемгә ҡарата алдынғы ҡарашта булыуына, яҡтылыҡҡа ынтылыуҙарына һәм был ынтылышты үҙаллы хәл итә алыуҙарына төплө дәлил булып тора. Шулай итеп, башҡорт халҡының тарихи, мәҙәни, ғилми үҙенсәлектәргә бай, милли үҙаңы юғары кимәлдә булыуына тағы бер тапҡыр инандым һәм ғорурландым. Үҙемде борсоған бер һорауға төплө яуап тапҡан һымаҡмын.

Әммә ни өсөн башҡорт халҡын, дөйөм алғанда төрки телле халыҡтарҙы, урыҫ һыҙмаһына (кириллицаға) күсереүҙәренә аңлайышлы һәм ҡәнәғәтләнерлек яуап таба алмайым әле. Моғайын, шулай кәрәк булғандыр!? Урыҫ һыҙмаһында хәрефтәр индереү «оло ағайыбыҙ» туплаған ғилем үрҙәренә үрләргә, бөйөк Пушкин, Лермонтов һәм башҡа урыҫ яҙыусыларының әҫәрҙәрен еңел үҙләштерергә мөмкинлек бирҙе. Был миҙалдың бер яғы, ә икенсе яғында нимә бар икән?...

...Яңыраҡ ҡулыма бик боронғо фоторәсем килеп эләкте. «Был рәсем һинең тыуған ауылында XX быуат башында төшөрөлгән, унда ата-бабаларың да бар. Нәҫелегеҙ уҡымышлы булған, ишан дәрәжәһендәге Сисәнбай бабайың Ҡазанда һәм Ҡәһирәлә табиплыҡҡа уҡып ҡайтҡан», – тип Марат ағай Ғафаров биргәйне. Был ваҡиғанан һуң Сисәнбай бабайымдың ҡайһы бер ҡульяҙмаларын да эҙләп таба алдым. Әммә, боронғоса яҙыу танымағас, рәсемдәге исем-шәрифтәрҙе һәм ҡульяҙмаларҙы әлегә уҡый алмайым. Ауылда дини йолаларҙы атҡарып йөрөгән Әхәт

бабайым ғәрәп һыҙмаһын өйрәтә башлағайны заманында, шулай ҙа «ишек ҡашындағы тал сыбығы» һымаҡ көслө дәлил етмәгән малай кешегә…

… Миҙалдың икенсе яғын ипләберәк ҡараһаҡ, борондан килгән үҙ мәҙәниәтебеҙҙән, әҙәбиәтебеҙҙән айырып алғандары ярылып ята. Бөгөнгө көндә ата-бабаларыбыҙан ҡалған ҡомартҡыларҙы, көнсығыш илдәренең ғилем сығанаҡтарын өйрәнеүҙән мәхрүмбеҙ. Был мәҡәләлә Обуховты, Круковскийҙы миҫалға алыуыбыҙ ҙа ошо мәхрүмлектән килә. Күпме бөйөк әҫәрҙәр уҡылмаған, күпме бөйөк яҙыусылыр онотолған, күпме тарих биттәре юйылған!? Хәҙер ябай ауыл малайҙарына Ҡәһирәлә уҡыу тәтемәй. Рәсәйҙәге уҡыу йорттарының ишектәре лә төрки телле халыҡтар өсөн киң итеп асылмаған. Бик ныҡ тырышҡандар ғына сират күперен үтә ала. 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре был күренеште яҡшы сағылдыра. Рәсәй буйынса дөйөм алғанда, 15 йәштән өлкәнерәк 1000 кеше иҫәбенә, урыҫтарҙа 194 кеше юғары белемле, татарҙарҙа – 127, сыуаштарҙа – 100, башҡорттарҙа – 95 кеше. Нисек кенә өгөтләһәләр ҙә, «башҡорттың уҡырға теләге юҡ» тигән фекергә ышанмайым.

Э-эх, һеҙ, көнбайышҡа «тәҙрә уйыусы»лар һәм «тәҙрә уйҙыртыусы»лар, ни өсөн Көнсығышҡа ҡараған «тәҙрә»не томаланығыҙ икән, ике «тәҙрә»ле өй эсе тағы ла яҡтыраҡ булыр ине. Моғайын, көнсығышҡа ҡарағаны «ҡарындыҡлы тәҙрә» түгел, ә «гәлсәр быялалы ҙур бүлмә ишегелер»!? «Ишектән» сығып китерҙәр тип ҡурҡтығыҙмы? Рәсәйҙең дәүләт тамғаһындағы сәмреғош бер башы менән Көнбайышҡа, икенсеһе менән Көнсығышҡа ҡарап тора. Әммә ләкин, Көнбайышта күргәндәрен беҙҙең аңыбыҙға нығыраҡ һеңдерергә тырыша, сөнки Көнсығышҡа ҡараған күҙҙәре насар күрә.

«Кем ғәйепле?» булыуын асыҡларға тырышыу файҙаһыҙ. Ә бына «Нимә эшләргә?» икәнен кисектермәй хәл итергә кәрәк.

Беренсенән, Көнбайышҡа ҡараған «тәҙрә»нән «ел өрөүен» туҡтатырға, йәғни урынлы-урынһыҙ сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙы ҡырҡа кәметергә. Башҡортса биш һүҙлек һөйләм дә төҙөй алмайбыҙ бит. Был йәһәттән, сит телдәрҙән ингән һүҙҙәргә башҡорт ялғауҙары ҡушып һүҙлектәр, әсбаптәр баҫтырған белгестәрҙе тәнҡитләмәй түҙә алмайым. **«Сит телдәрҙән ингән һүҙҙәр тәржемә ителмәй» – тигән ҡанунды онотorға ваҡыт!** Халҡымды көсләп телһеҙ итәһегеҙ бит!

Икенсенән, «өй эсендә» лә ҡайһы бер яңы тәртиптәр урынлаштырыу хилаф булмаҫ. «Беҙ правительствоның милли политикаһын ныҡ поддерживать итәбеҙ», йәки «һамауыр тиклем һөгөлдөр үҫтерәбеҙ», тип һөйләшкәндәрҙән халыҡ көлә бит. Мәктәптәрҙә һәм башҡа уҡыу йорттарында башҡорт телен, башҡорт әҙәбиәтен, башҡорт мәҙәниәтен уҡытыуҙың сифатын күтәрергә, бының өсөн фән уҡытыусыларына өҫтәмә эш хаҡы түләргә. Татарстандағы һымаҡ.

Өсөнсөнән, Көнсығышҡа ҡараған «тәҙрә»не кире асырға. Юғары уҡыу йорттарында, мөмкин булһа мәктәптәрҙә лә, ғәрәп һыҙмаһы буйынса белгестәрҙе күпләп уҡытыуҙы ойошторорға. Боронға әлиф белгән белгестәрҙе, әле юғалмаған ҡомартҡыларҙы өйрәнеү һәм башҡаларға еткереү маҡсатынан, фәнни эҙләнеүҙәргә йәлеп итергә. Белгестәрҙе махсус дәртләндереү тәжрибәһен киң ҡулланырға.

Дүртенсенән, башҡорт зыялыларына алда әйтелгән тәҡдимдәр үтәлер әле, тип көтөп ятмаҫҡа. Милләтебеҙ өсөн эшләнәһе эштәр беҙҙән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Башҡорт халҡының йәшәйешкә, ғилемгә булған ҡарашын, үҙаңын артабан камилаштырыуҙы бойомға ашырырға кәрәк. Алтын Урҙа заманында беҙҙең менән күрше йәшәгән болғарҙар, хазарҙар, ғуздар тарих саңына әйләнеп юҡҡа сыҡҡан ваҡытта, башҡорттарҙың халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалырлыҡ көслө ихтыярлы булыуын хәтерҙән сығармайыҡ.

*«Башҡортостан» гәзите, 5 февраль 2008 йыл, 22-се һан*

## «Беҙ Мәсетле!» йырының тарихы

**Күңелемдә бала саҡтан таныш булған дәртле көй яңғырай. Уға ҡушылып әленән-әле «Мәсетле, Мәсетле, беҙҙең йәштәр бәхетле» тип эстән генә йырлап та ҡуям. Ҡасан тыуған һуң был йыр? Кем яҙған, кем беренсе тапҡыр йырлаған икән? Һораштыра торғас, йыр тарихының эҙенә төштөм. Марат Ғафаровтың «Йырыбыҙ онотолмаһын» исемле мәҡәләһе башланғыс булды. Ә күптән таныш, йыш ҡына күрешеп торған Нурый бабай йыр яҙмышына туранан-тура бәйле шәхес булып сыҡты. Үҙенең «Тормош һуҡмағынан атлағанда» исемле иҫтәлектәр китабында ошо хаҡта тасуирлап яҙған. Уның менән ҡабаттан осрашып, борсоған һорауҙарға яуап таба алдым.**

Яҡташым Нурый Мирсәйет улы Мирсаев 1922 йылдың 22 апрелендә хәҙерге Мәсетле районының Абдулла ауылында тыуған. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу мәктәбендә белем ала һәм Мәсетле районының Ҡорғат ауылында башланғыс кластарҙа уҡыта. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышына алына, бер нисә тапҡыр ҡаты яралана. Госпиталдә дауаланғандан һуң Мәскәү хәрби заводтарының береһенә эшкә ебәрелә. Армиянан демобилизацияланғас, тыуған ауылына ҡайта, Абдулла ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыта. 1947 йылда яңы ойошторолған Александр Матросов исемендәге колхозға рәйес итеп һайлана. 1950–1960 йылдарҙа ул райондың колхоз мәктәбе, район мәҙәниәт йорто директоры, Мәсетле район Советы башҡарма комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләй. Шул осорҙа Нурый Мирсәйет улының ныҡышмалылығы менән районда үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәре ойошторола. Төрлө ауылдарҙан йыйылған һәләтле йәштәр берләшеп, дәртләнеп ижад итә. Бөгөн исемдәре республикала ғына түгел, донъяға киң билдәле булған сәнғәт оҫталары Роберт Бәҙретдинов, Роберт

Заһретдинов, Рифҡәт Исрафилов, Зилара Әйүпова, Нәзирә Закирова, Мулланур Ниғмәтуллиндар оло сәхнәгә юлды тап Мәсетле район мәҙәниәт йортонан башлаған. Туҡтағыҙ әле, ул йылдарҙағы ваҡиғалар тураһында һүҙҙе Нурый бабайҙың үҙенә бирәйек.

…Әлбиттә, сәнғәт түңәрәктәренең эше еңелдән булманы. Йәштәрҙе йәлеп итеү, йәш талантларҙы эҙләү – бер, ә быны уның кәрәклеген аңламаған ҡайһы бер етәкселәрҙең был эшкә теше-тырнағы менән ҡаршы төшөүе – бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Ниндәй генә колхоз рәйесе йәиһә совхоз директоры уттай эш өҫтөндә тракторсы, комбайнсы, быҙау, ат ҡараусыны тота һалып ҡына район агитбригадаһына ебәргеһе килһен инде? Юҡ ундай етәксе. Шуға ла райком пленумы булһынмы, райсовет сессияларындамы, былар тоталар ҙа минең кәрәкте бирәләр, тетмәкәйҙе тетәләр. Йәнәһе, мин йәштәрҙе ҡотортам, эштән айырам. Район хужалары иһә, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмая ла миңә күҙ ҡыҫа, «ҡурҡма, Мирсаев, беҙ һине йәберләргә бирмәбеҙ», тигәндәй була үҙҙәре, ләкин һүҙ алып яҡламайҙар.

Тиҙҙән ҡаршыларҙың ай-вайына ҡарамай, РДК ҡарамағында ижади кәңәшмә төҙөп ебәрҙек. Уға «Комсомолец» колхозы рәйесе Ғилемхан Абрахманов, Республика балалар шифаханаһы директоры Николай Баутин, Йонос ауылы китапханасыһы Мәҙинә Сөләймәнова, киномеханик Нурғәли Әлхәйҙәров, Оло Ыҡтамаҡ урта мәктәбенең музыка уҡытыусыһы Вениамин Сундеевтар инде. Әгәр Николай Баутин, шифахана балаларын һәм хеҙмәткәрҙәрен сәнғәткә йәлеп итеп, үҙешмәкәр коллектив ойоштороп ебәрһә, Ғилемхан Абрахманов ауыл мәҙәниәт йорто һәм китапханаһын үҙ ҡанаты аҫтына алды, матди яҡтан ихлас ярҙам күрһәтте һәм иң мөһиме – ауыл мәҙәниәт йортон һалдырҙы. Бәлки, шуғалыр ҙа Дыуан-Мәсетле ауылы йәштәре йырға ла, бейеүгә лә маһир булды, районда үткәрелгән конкурс, олимпиада, фестивалдәрҙә алдынғылар рәтендә йөрөнө.

Мәҙәниәт йорто ҡарамағындағы үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәге районды ң барлыҡ ауылдары буйлап йөрөп концерт, спектакль ҡуйҙы. Ауыл клубтары, ырҙын табаҡтары, фермалар дер һелкенеп торҙо. Үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәгенең уңышлы сығышы яҡташтарыбыҙҙың ял итеүенә йәм өҫтәне, район алдында ла, республика алдында ла ҙур уңыштарға өлгәштек. Мәсетле менән генә сикләнмәне йәштәр, күршеләрҙең халҡын да ҡыуандырҙы. Дәртле, дарманлы саҡ ине шул. Эшкә лә өлгөрҙөләр, сәнғәтте лә күтәрҙеләр. Көн дә булмаһа ла, аҙнаһына бер-ике тапҡыр репетициялар үтә. Район үҙәгенә башлыса йәйәүләп килә торғайнылар. Сәнғәт түңәрәгенең эшен ойоштороуҙа район мәҙәниәт йортоноң художество етәксеһе Мөхәмәтхәй Ибәтов ҙур өлөш индерҙе, уның тормош иптәше Гөлсөм Хөсәйенова ла әүҙем ҡатнашты.

Сәхнәгә матур итеп кейенеп сығырға ла кәрәк бит инде. Шул сәбәпле, йәштәрҙе матди яҡтан дәртләндереү маҡсатында, йыш ҡына түләүле сығыш яһаныҡ. Килемдең өстән ике өлөшөн артистарға таратып бирҙек, бер аҙын дөйөм сығымға тотондоҡ. Йәштәрҙең өҫ-башы бөтәйеп ҡалды, күңелдәре күтәрелде. Тағы ла дәртлерәк ижад иттеләр.

1953 йыл ине, буғай, Өфөлә республика кимәлендә район-ара үҙешмәкәр коллективтар фестивале үтте. Аксаков паркында ул саҡта Луначарский исемендәге асыҡ сәхнәлә сығыш яһаныҡ. Мәскәүҙән килгән вәкил, жюри етәксеһе, фестивалде йомғаҡлау өлөшөндә мәсетлеләрҙең сығышына иң юғары баһа биреп, беренсе урынды алыусыға тынлы оркестр өсөн уйын ҡоралдары бүләк ителеүен иғлан итте. Эй, беҙҙең ҡыуанғандар! Оркестрлы булабыҙ бит, ауыл райондарында быға тиклем осрамаған хәл! Бер аҙҙан тынлы оркестрҙы ла ойошторop ебәрҙек. Вениамин Сундеев беренсе етәксеһе булды.

Бер ваҡыт Өфөгә эш менән килгәндә республиканың мәҙәниәт министры үҙ кабинетына саҡырып алды ла 80 кешелек хор коллективы ойошторорға ҡушты.

– Был эште һиңә ышанып тапшырам, Мирсаев. Ундай хор район ғына түгел, республика өсөн кәрәк, – тине.

– Бурысты үтәрбеҙ. Тик, республика өсөн кәрәк булғас, белгес ебәрегеҙ. Беҙ ауыл таҡмаҡтарын йырлай беләбеҙ, ә хор менән сығыш яһарға өйрәтергә махсус белем кәрәк, – тип, үҙ мәнфәғәтемде ҡайырам.

– Хәйләкәрһең дә инде, Мирсаев. Хормейстер ебәрербеҙ, – тип, министр вәғәҙә биреп ҡалды.

Ҡуйылған бурысты үтәр өсөн һәр ауылдан йырға һәләтле йәштәр иҫәбен алып, райкомдан ваҡытлыса эштән бушатыуҙы һораным. 80-гә тултырып булманы, әммә 60 кешелек хор төҙөнөк. Хор коллективы бер төҫтән кейенергә тейеш, тик ҡайҙан аҡса табырға? Ағымдағы йылда райфо тарафынан бер тин дә аҡса ҡаралмаған. Йәштәр ике концерт бригадаһы төҙөп, ауылдар буйлап сығып китте. Халыҡҡа аңлатып, түләүле концерттар күрһәтеп, бер ни тиклем аҡса эшләп алдыҡ. Бынлһы хәл ителде, ләкин район үҙәге магазиндарында, хатта базала беҙгә кәрәкле әйбер юҡ. Телефон аша булған магазиндарҙы белешеп сыҡҡандан һуң, «Серп и Молот» колхозынан тәүлегенә 10 һум түләп ат алдым да Дыуан районы ауылдары буйлап сығып киттем.

Йөрөй торғас, Мәтәле ауылынан 150 метр затлы аҡ тауар һатып алып ҡайттым. Әммә унан күлдәктәр тектерәһе бар бит әле. Сараһыҙҙан райкомдың беренсе секретары Вәхитовҡа тағы барып, хәлде аңлатып бирҙем. Промартелдә комсомол өмәһе үткәреп, хор коллективы өсөн күлдәктәр тегеүҙе ойоштороуҙы һораным. Ғәфүр Шакир улы һүҙемде йыҡманы, промартель директоры Швецованы саҡырып алып, мәсьәләне хәл итергә ҡушты. Улар, комсомол өмәһе яһап, ике ялда кәрәкле кейемде

тегеп бирҙе. Шулай итеп, затлы аҡ тауарҙан ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 20 күлдәк һәм 15 кофта, ирҙәргә 25 күкрәксә тегелде.

Министр ҙа вәғәҙәһендә торҙо. Өфөнән белгес килде лә ике аҙна буйына районда булып, коллективты хор менән йырларға өйрәтте. Хормейстер етәкселегендәге һуңғы репетицияла, шартына килтереп, йырсылар яңы тегелгән кейемдә халыҡ алдында сығыш яһаны. Артабан махсус рәүештә Өфөгә барып, филармония залында концерт ҡуйып, министрға имтихан бирҙек.

Бына шул осорҙа яҙылды «Беҙ – Мәсетле!» йыры. Нисек инде, районыбыҙҙың үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәге республика кимәлендә абруй яулаған, башҡа райондарҙа булмаған тынлы оркестр ойошторғанбыҙ, үҙешмәкәр хор бар, ә районды данлаусы йыр юҡ. Булмағас, яҙырға кәрәк, тип дәртләнеп тотондо йәштәр. Һүҙҙәрен күмәкләп яҙҙыҡ тиергә лә була, әммә текст авторы итеп Гөлсөм Хөсәйенованы атарға кәрәк, сөнки куплеттар уның етәкселегендә яҙылып, уның әҙәби эшкәртеүендә еренә еткерелде. Көйөнә килгәндә, хәл икенсерәк булды. Теләштән, әллә Тәкәнән инеме, үҙенсәлекле уйнау һәләтенә эйә булған гармунсы егет бер көй уйнап күрһәтте. Әммә ауыл көйөнә хор менән йырлауы ҡыйын, шуға күрә уны Мөхәмәтхәй Ибәтов хор талабына тура килтереп эшкәртте. Эйе, йырҙың авторҙары бар – Мөхәмәтхәй Ибәтов һәм Гөлсөм Хөсәйенова. Әммә ул йыр китаптарына «халыҡ йыры» булып инеп китте, сөнки, Ибәтов һуғыш ваҡытында әсирҙә булыу сәбәпле, авторҙарҙы күрһәтергә рөхсәт итмәнеләр. Йырҙың тәүге исемен дә үҙгәртергә тура килде, баш ҡалалағы кемгәлер ул оҡшаманы. Шулай итеп, «Беҙ – Мәсетле!» йыры «Мәсетле йырҙары» булып йөрөй. Үҙемдең хәтирәләр китабында йырҙың тәүге исемен күрһәттем. Нисек кенә булмаһын, районды данлаусы беренсе йыр булып тарихҡа инде. Йәштәрҙең киләсәккә ышаныслы ҡарашын, бәхетле тормош төҙөүҙәрен сағылдырған һүҙҙәр, йырҙы күтәреп алған дәртле көй күптәрҙең күңеленә хуш килде.

1955 йылда Мәскәүҙә Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәте ун көнлөгө үткәрелде. Мәртәбәле сарағa Мәсетле районынан 40 кешелек хор коллективы барҙы. Әйтергә кәрәк, республика делегацияһы составында СССР-ҙың баш ҡалаһына барыу мәсетлеләр өсөн оло ҡаҙаныш булды, абруй өҫтәне. Быңдай ышаныс республиканың бер нисә районына ғына күрһәтелде. Делегация башлыса күренекле яҙыусыларҙан, һөнәри артистарҙан төҙөлгәйне.

Әлбиттә, Мәскәү сәхнәһендә «Беҙ – Мәсетле!» йыры ла яңғыраны, тамашасыларҙың алҡышына күмелде. Ғөмүмән, баш ҡалала мәсетлеләр уңышлы сығыш яһап ҡайтты. Партияның Мәскәү ҡала комитетының 1-се секретары Фурцева исеменән минең үҙемә төбәп рәхмәт хаты, ә хор коллективына махсус диплом килде. Мәскәүҙәрҙең алҡыштарына ҡушып, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Мәсетле районының мәҙәниәт йортона пианино бүләк итте.

«Беҙ – Мәсетле!» бик популяр йыр булып китте, республиканың симфоник оркестры менән яҙма эшләнде, радио аша йыш тапшырылды. Ә хәҙер ул йыр ишетелмәй. Һүҙҙәре заманаға тура килмәй, тигән булаларҙыр инде. Йырҙың йыртығы юҡ ул. Замана еленә лә яраҡлаша ала. Икенсе куплетты:

Эшсән халыҡ тигеҙ йәшәй
Башҡортостан ерендә.
Бәхет саҡкылары яна
Мәсетлеләр йөҙөндә.

– тип йырлағанда бик урынлы булыр, киләсәктә үҙгәртергә лә кәрәкмәҫ. Әйткәндәй, тәүге версияла «Бәхет саҡкылары яна» ине, әммә ул заман ҡанундарына тура килтереп, «Ильич лампалары» тип алынды. Дүртенсе куплеттағы «Гөрләй колхоз ҡырҙары» тигән юлды «Гөрләй ялан-ҡырҙары» тип йырларға була.

Шуныһы ҡыуаныслы: мәсетлеләр бөгөн дә бейеүгә-йырға дәртле. Концерт, спектаклдәр, төрлө конкурстар үҙешмәкәр сәхнәнән төшмәй. «Беҙ – Мәсетле!» йыры ла мәҙәниәт йортонда даими яңғырай, тип әйтәләр. Тимәк, традициялар дауам итә. Ижад юлын ауыл сәхнәһендә башлаған Мәсетле егете Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың мәртәбәле ҡумыҙ бәйгеһендә «Донъя виртуозы» исемен яулауы – шуға дәлил. Моңлолар, батырҙар, матурҙар мәсетле йәштәре. Ил, донъя күләмендәге бәйгеләрҙә ҡатнашып, Башҡортостанды данлайҙар. Афарин!

Бына шулай йырҙың тарихы. Ә һеҙ, йәштәр, йырлағыҙ ул йырҙы. Ғөмүмән, донъяла йырлап йәшәргә кәрәк. Тамаҡ хаҡын саманан тыш ҡайғыртыу, матди байлыҡ артынан ҡыуыу кешене байытмай. Йән өсөн рухи байлыҡ талапителә, шул кешене йәшәтә. Затлы әйберҙәр, ҡатлы-ҡатлы һарайҙар был донъяла ҡала, ә рухи байлыҡты йән үҙе менән ахирәткә ала. Йырлағыҙ, ейән-ейәнсәрҙәр, бәхетле булығыҙ!..

Йөрәге йәш, зиһене камил Нурый Мирсәйет улы Мирсаевтың. Малай саҡта ялан тәпәй йөрөп өшөгән, Бөйөк Ватан һуғышында яраланған аяҡтары ғына борсой. Ләкин йырлап йәшәгән, тормош һуҡмағынан йырлап атлаған кеше ауырлыҡҡа бирешмәй. Мәсетле егете бит!

Шуның менән мәҡәләмде тамамларға уйым бар ине. Әммә ниндәйҙер күренмәгән кәртә ике айҙан ашыу уны баҫмаға ебәрмәй тотто. Баҡһаң, «Беҙ – Мәсетле!» йырын иҫкә алған тағы бер сығанаҡты эҙләп табыуымды көткән икән. 1954–1957 йылдарҙа Мәсетле район Советы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләгән Мөхәмәтнур Фәтхелислам улы Фәтҡиевтең «Дорогу осилит идущий» исемле хәтирәләр китабында йыр тарихы теркәлгән. Ул да мәсетлеләрҙең йырға-бейеүгә дәртле булыуҙарын яҙған. 1955 йылдың ҡышында үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәренең ҙур район конкурсы уҙғарылыуын, еңеүселәр билдәләнеүен, бүләктәр тапшырылыуын бәйән итә. «Мәсетле,

Мәсетле, беҙҙең йәштәр бәхетле» йыры шул конкурс һөҙөмтәһендә тыуыуын, көй яҙыусы Мөхәмәтхәй Ибәтов икәнен раҫлай.

Шулай итеп, тәүге исеме «Беҙ – Мәсетле!» тигән йыр 1955 йылда яҙылған, авторҙары – Мөхәмәтхәй Ибәтов һәм уның ҡатыны Гөлсөм Хөсәйенова, 1955 йылда Мәскәү ҡалаһында үткән Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәрендә Мәсетле район үҙешмәкәр хоры башҡарыуында алҡыштар яулаған.

*«Башҡортостан» гәзите, 11-12 март 2014 йыл*

**Беҙ – Мәсетле!**

Гөлсөм Хөсәйенова һүҙҙәре, Мөхәмәтхәй Ибәтов музыкаһы.

Беҙ – Мәсетле, беҙ – Мәсетле,
Йәмле Әй буйҙарынан.
Беҙҙе иҫкә алырһығыҙ
Мәсетле йырҙарынан.

Мәсетле, Мәсетле,
Беҙҙең йәштәр бәхетле!

Эшсән халыҡ тигеҙ йәшәй
Башҡортостан илендә.
Бәхет саҡҡылары яна
Мәсетлеләр йөҙөндә.

Мәсетле, Мәсетле,
Беҙҙең йәштәр бәхетле!

Әй йылғаһы буйҙарында
Йәй көндәре күңелле.
Мәсетлеләр йырлағанда
Дәртләндерә күңелде.

Мәсетле, Мәсетле,
Беҙҙең йәштәр бәхетле!

Беҙҙең йәштәр эшкә бара,
Гөрләй ялан-ҡырҙары.
Үҙе эшсән, үҙе матур
Егеттәре, ҡыҙҙары.

Мәсетле, Мәсетле,
Беҙҙең йәштәр бәхетле!

Беҙҙең йәштәр ял иткәндә
Яңғырап тора йырҙары.
Алһыу йөҙлө, ҡара күҙле
Егеттәре, ҡыҙҙары.
    Мәсетле, Мәсетле,
    Беҙҙең йәштәр бәхетле!
Мәсетленең егеттәре
Бейергә, йырға оҫта.
Дошман сикте боҙа алмаҫ,
Улар торғанда һаҡта.
    Мәсетле, Мәсетле,
    Беҙҙең йәштәр бәхетле!
Әй буйҙары йәмле була
Елберләгән тал менән.
Мәсетлеләр маҡтаналар
Эштә алған дан менән.
    Мәсетле, Мәсетле,
    Беҙҙең йәштәр бәхетле!

нота өсөн

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш һүҙ урынына ………………………………………………....3
Ҡошсо ырыуы башҡортары йыйынына сәләме һүҙе …………….4
Егеттәр ҙә булыр аҡһаҡал …………………………………………5
Аҡһаҡалдар васыяты ………………………………………………8
Ҡабат һуғыш ҡына булмаһын, уландар! ……………………....14
Һуғыш ҡорбаны бәйете ……………………………………...15
Ямандан башлау – яман! ……………………………………19
Йыһанға йышыраҡ ҡара! ………….………………………....26
Яңы быуат бәйете ………………………………………….....30
4-се Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында әйткәне ………....36
Башҡортостан (Насип Һаҡмар) …………………………..38
Заманаға әҙер бул! ………….………………………………...39
Сама белеп йәшә, кеше! ………………………………… 40
Шаһтауҙың әйткәне…   ………...………………………...42
Ниңә Интернетта һин һаман? ……………………………45
Башҡорт Википедияһына — 10 йыл! (Тамара Искәндәриә) …....46
Башҡорт Википедияһының юбилейы (Фирүзә Абдуллина) …....47
Рөстәм Нурыевҡа (Фирүзә Абдуллина) ………………………48
Пушкинаға оҡшатып…   …………………………………...50
«Тәҙрә уйыусы»ларға «тар ярыҡтан» ҡараш, йәки Ябай башҡорт уҙаманының уйланыуҙары ……………………………………..51
«Беҙ Мәсетле!» йырының тарихы ……………………………..56
«Беҙ Мәсетле!» йыры ……………………………………..64

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. № 436-ФЗ 12+

Литературно-художественное издание

ГАТАУЛЛИН (НУРЫЕВ) Рустам Шакирьянович

ПОЧАЩЕ СМОТРИ В НЕБО!

Кубаиры, баиты, айтышы, публицистика
(на башкирском языке)

Ответственный за выпуск: Р.Ш.Гатауллин
Редактор: Д.В.Гатауллина
Корректор: А.Ф.Акбутина
Дизайн обложки: В.И.Зарипова
Фото на обложке: https://commons.wikimedia.org/
Весеннее_небо_(8742243548), Николас Титков

Издательство «Самрау»,
450002, г. Уфа, ул. М.Губайдуллина, 19/5,
http://samrauprint.ru/, 8 (347) 266-48-43

Подписано к печати 12.03.2021
Бумага писчая, Формат 60х84 1/16
Гарнитура Times New Roman
Отпечатано на ксероксе
Усл.п.л. 3,95
Заказ № , Тираж 500
Возрастное ограничение 12+

Отпечатано с готовых файлов в секторе
оперативной полиграфии Башкортостанстата
450077, г.Уфа, ул. Цюрупы, 17,
https://bashstat.gks.ru/, 8 (347) 273-30-49